# Йомаҡтар

Йомаҡ — халыҡ ижадының иң боронғо жанрҙарының береһе. Йомаҡтар кешеләрҙең, айырыуса балаларҙың, тапҡырлығын һынау һәм зирәклеген үҫтереү сараһы булараҡ ҡулланыла. Йомаҡтар айырым предметтың билдәһен икенсе бер предметҡа, күренешкә күсереү нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Шуға күрә улар тормоштағы конкрет предметтар, күренештәр менән бәйләнгән. «Йомаҡ» атамаһы башҡорт халҡында йомоу һүҙенән килеп сыҡҡан, йәғни йомаҡ - ул уйҙы йомоп, йәшереп әйткән фекер. Татар халҡында ул «табышмаҡ» тигән исем менән йөрөй һәм «тамырын табыу» тигән һүҙ менән аңлатыла. Татар фольклорында ла 20-се быуат баштарына тиклем табышмаҡ менән бер рәттән йомаҡ атамаһы ла киң ҡулланылған. Табышмаҡ атамаһы әзербайжан,төрөкмән, уйғыр,алтай, ә йомаҡ - ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ,ҡумыҡ телдәрендә ҡулланыла. Рус фольклористикаһы иһә “загадка” һүҙенең килеп сығышын “гадать” һүҙенән сығып аңлата.

ТРАНСПОРТ ТӨРҘӘРЕ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Ат түгел, кешнәмәй,
Йөҙ аттан кәм эшләмәй. /трактор/

Һыу эсә, бесән ашамай,
Үҙе дүрт аяҡлы. /автомобиль/

Балыҡ түгел, ҡош түгел,
Һыуҙа йөрөй үҙе гел. /пароход/

Ҡамыты юҡ, дуғаһы юҡ
Ҡара атым егеүле. /паровоз/

Эй ат саба, ат саба,
Һығыла билгенәһе,
Тояҡтары резина,
Тимерҙән дилбегәһе. /автомобиль/

Йә тәрән соҡор ҡаҙый ул,
Йә бейек өйөм өйә.
Төҙөүсөләр уны һөйә,
"Тимер бәһлеүән!” — тиә. /экскаватор/

Тимер сысҡан,
Сүс ҡойроҡ. /самолет/

Ҡанаты бар — елпемәй,
Эсе йылы — ел теймәй. /самолет/

Ҡанаты бар, йөнө юҡ,
Үҙе бара, юлы юҡ. /самолет/

Юҡ, мин поезд түгел,
Ләкин уға оҡшаған.
Сөнки йөрөйбөҙ беҙ
Тимер юлдарҙан. /трамвай/

Үҙе ура, үҙе һуға,
Үҙе ҡапсыҡҡа һала.
Шаулап, гөрләп эшләгәнгә
Ҡыр матурланып ҡала. /комбайн/

Тимер жираф, башы күктә,
Күп күтәрә көсө күпкә,
Тонна-тонна йөктәрҙе
Эләктереп ала ул,
Балкондарын балҡытып,
Бейек өйҙәр һала ул. /кран/

Ул үҙе шундай көслө,
Тешле-тешле сүмесле.
Бер үҙе эшләй ала
Йөз кешелек эште. /экскаватор/

Эйәремә менәләр,
Өҙәңгемә тибәләр.
Йөгөртәләр, саптыралар,
Кәрәк ергә китәләр. /мотоцикл/

Арымай, талмай,
Ат артынан ҡалмай. /арба/

Ике күсәр дөнъя кисер. /арба/

Ике аяҡлы үгеҙ,
Маңлайында ҡуш мөгөҙ. /велосипед/

Үҙе атта бара,
Үҙе атлап бара. /велосипед/

Үҙе бара, эҙе юҡ,
Маңлайында күҙе юҡ. /кәмә/

Ел өрә - үҙе бара. /елкәнле кәмә/

Хайран уның йөрөүе,
Бик йыраҡтан килүе,
Ай-һай, уның кешнәүе.
Аяғында тимере,
Тамағында күмере,
Ерҙе ярып килүе. /паровоз, поезд/

Уф-уф һулар,
Уфтанһа ла алып китер,
Барыр еренә етер. /паровоз, поезд/

Ҡылға аҫылына,
Тимергә таяна.
Ултыртып саба
Теләһәң ҡайҙа. /трамвай

ЙОРТ ХАЙУАНДАРЫ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Йомаҡ әйтәм, йомаҡ әйтәм,
Уны сискән сос булыр,
Сисәлмәгән тик торор.

Һаҡалы бар - бабай түгел,
Бер кемгә лә ағай түгел.
Тәү ҡарашҡа меҫкен, өтөк,
Үсектерһәң - китә төкөп. /кәзә/

Йылыта, кейендерә,
Әҙәмде һөйөндөрә. /һарыҡ/

Дүртәүҙер аяғы,
Ҡайсылай ҡолағы,
Таштан ҡаты тояғы. /ат/

Хайран уның йөрөүе,
Бик йыраҡтан килеүе,
Ай-һай уның кешнәүе.
Аяғында тимере,
Тамағында күмере,
Ерҕе ярып килеүе. /ат/

Ишек алдында сүмәлә,
Аҫтында дүрт бағана,
Алдында ике һәнәк,
Артында һепертке. /һыйыр/

Ҡуян ҡолаҡлы, ат тояҡлы. /ишәк/

Муйыны – дуға, арҡаһы – эйәр. /дөйә/

Туны бар – сапаны юҡ,
Мыйығы бар – һаҡалы юҡ. /бесәй/

Арҡаһынан һыпырһаң,
Күҙҙәре ялт-йолт итә.
Гел яратып, иркәләп,

Һөйөп торғанды көтә. /бесәй/

Ауыҙы бар – көйшәмәҫ,
Теше бар – тешләмәҫ,
Ултырһаң – күтәрер,
Етәкләһәң – эйәрер. /ат/

Ары ла йүгерә Зәпзәки,
Бире лә йүгерә Зәпзәки.
Тамаҡ ҡыра Зәпзәки,
Һаҡал һелкә Зәпзәки. /кәзә/

Һәр кистә яландан ҡайта
Мөңрәй-мөңрәй көтөүҙән.
Май, ҡаймаҡ яһайҙар уның
Тәмле ап-аҡ һөтөнән. /һыйыр/

Бысраҡ һыуҙа аунай,
Мырҡ-мырҡ, мырҡылдай. /сусҡа/

Йәйен дә, ҡышын да,
Йылы тунда. /һарыҡ/

Бик оҙон мыйыҡтары,
Күҙҙәре янып тора.
Сысҡандарҙы аулар өсөн
Туҡтауһыҙ хәйлә ҡора. /бесәй/

Ишек алдында хужа,
Сит малдарҙы ул ҡыуа,
“Һау-һау!” - тиеп ул өрә,
Барса ерҙә өлгөрә. /көсөк/
(Ғүмәр Ғайсин)

Һаҡаллы ул, мөгөҙлө,
Һанға һуҡмай һис кемде.
Баҡсаға бик йыш инә,
Кәбеҫтәне кимерә. /кәзә/
(Ғүмәр Ғайсин)

Мендәр өҫтөндә ятыр,
Йә мейескә ул ҡасыр.
Көндөҙ әҙерәк серем итеп,
Төнөн сысҡан ул тотор. /бесәй/
(Ғүмәр Ғайсин)

Йүгерекләп йөрөр ул,
Ләү-ләү итеп өрөр ул,
Мал-тыуарҙы ҡыуыр ул,
Өйгә һаҡсы булыр ул. /көсөк/
(Ғүмәр Ғайсин)

Шып-шым баҫып йөрөй ул,
Сысҡандарҙы тота ул.
Һөт эсә лә рәхәтләнеп,
Мейес башында ята ул. /бесәй/
(Ғүмәр Ғайсин)

ҠЫРАҒАЙ ХАЙУАНДАР ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Эй тырыша – кәрәк уға
Сәтләүектең орлоғо.
Өйө ағас ҡыуышында,
Көлтә ҙурлыҡ ҡойроғо. /тейен/

Ағас башында туп һымаҡ
Ул һикереп шаяра,
Йә тубырсыҡ эҙләп йыя,
Йә ул сәтләүек яра.
Имәнгә ҡора өйөн,
Ниндәй кейек ул? ... /тейен/

Ҡойроғо көлтә кеүек,
Яратҡаны сәтләүек,
Ҡыуышҡа яһай өйөн,
Был ни, әлбиттә,… . /тейен/

Энәләре күп булһа ла,
Кейем текмәй был кейек.
Сәнскеле балаһын да
Һөйә: ”Йомшағым!”- тиеп. /терпе/

Энәһе күп: йөҙләп-меңләп,
Бер ни тегә алмай йүнләп. /терпе/

Борсаҡтай ғына күҙҙәре,
Морон осо ҡап-ҡара.
Яҡын килһәң, йоморлана,
Энәле - тотоп ҡара!
Кем белә, кем белә,
Йә әйтегеҙ тиҙ генә. /терпе/

Йәйен - урманда батша,
Ҡышын - ҡарҙан да аҫта. /айыу/

Йәйен - һоро, ҡышын - аҡ,
Ҡыҫҡа ҡойороҡ, шеш ҡолаҡ. /ҡуян/

Ерҙе тиштем – йәшәнем,
Ер өҫтөнә сыҡтым – үлдем. /һуҡыр сысҡан/

Йөрөмәй ул буранда,
Ҡышын йоҡлай урманда,
Йәйен солоҡ "таҙарта",
Еләкте лә ярата. /айыу/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡылый күҙ, оҙон ҡолаҡ,
Баҡсаны үтмәй урап,
Һайлап, кишер кимерә,
Бигерәк шәп йүгерә. /ҡуян/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ул тегеүсе булмаһа ла
Энәләр күп йөрөтә,
Яҡын килһәң - йомарлана,
Китһәң - йүгереп китә. /терпе/
(Ғүмәр Ғайсин)

Урманда йыш тап булыр,
Мөгөҙҙәре бигерәк ҙур,
Ат ҡәҙәре кәүҙәһе,
Һис еткермәй берәүҙе. /мышы/
(Ғүмәр Ғайсин)

Йәйгә сыҡһа һөйөнә,
Һоро тунын кейенә,
Ҡышын ҡарҙа күренмәй ул -
Кейенә аҡ кейемгә. /ҡуян/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡара морон, һарғылт йөн,
Көлтә ҡойроҡ, хәйләкәр,
Тауыҡ итен бик ярата,
Ялан, урманда йәшәр. /төлкө/
(Ғүмәр Ғайсин)

Бәләкәй генә, бик етеҙ,
Йөнтәҫ ҡойроҡ, ялтыр күҙ,
Сәтләүекте бик ярата,-
Кем ағаста? Әйтегеҙ. /тейен/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡомда мәҙәк юл ҡалдыра,
Һыуҙа йөҙә ҡай саҡта,
Үҙе менән һөйрәп йөрөй
Үҙенең өйөн йыраҡҡа. /гөбөргәйел/
(Ғүмәр Ғайсин)

ЙОРТ ҠОШТАРЫ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Һыуҙа йыуынып алды,
Өҫтө ҡоро ҡалды. /ҡаҙ/

Әсәй көтә был ҡоштарҙы,
Улар тоя һөйөү, наҙ.
Бәпкәләрен сығарғанда,
Шатлығынан бейей ... . /ҡаҙ/

-Ҡыт-ҡытыҡ,-ти,-ҡытыҡ,-ти,-
Тибенеүе ҡыҙыҡ,-ти,
Әйтеп ҡуймағыҙ яҙыҡ,
Әлеге ҡош ул-… . /тауыҡ/

-Мин барыһын уятам,- тип
Ҡысҡыра,-кикирикүүүк!
Бара торған ерегеҙгә
Һуңлап ҡуймағыҙ берүк!
Һис кәрәк түгел бәхәс,
Был булыр инде … . /әтәс/

-Ҡаҡ-ҡаҡ,-тиер,-ҡаҡ,-тиер,
Ниҙер ҡағырға ҡушыр.
Үҙе ҡанат ҡағып ҡына
Һыу буйында булашыр.
Күл, йылғала табыр наҙ
Ҡыҙыл ситек кейгән … . /ҡаҙ/

Башы тараҡ, ҡойроғо ураҡ,
Ҡысҡыртып борғоһон, уята барыһын. /әтәс/

Оса лап-лап, төшә лап-лап,
Йөҙә шәп-шәп, йөрөй саҡ-саҡ,
Әкрен атлап, кейеҙен ҡаплап. /өйрәк/

Күбеп китһә, көймә кеүек,
Күпереп бешкән икмәк кеүек,
Губернский ҡыҙҙар кеүек,

Ултырыуы мулла кеүек,
Ҡысҡырыуы торна кеүек?! /күркә/

Гөбөр-гөбөр гөбөрә, ҡыҙыл күрһә, ҡабара. /күркә/

Тарағы бар - сәсен тарамай,
Урағы бар – иген урмай. /әтәс/

Бәләкәй генә һары йомғаҡ
Йүгереп йөрөй сиҙәмдә. /себеш/

Бәпкәләрен үләндә
Эйәртеп йөрөтә ул,
Оҙон муйын,ҡыҙыл тәпәй,
Ыҫылдап суҡымаҡсы ул. /ҡаҙ/
(Ғүмәр Ғайсин)

Таң атмаҫ борон уяна,
Ҡанат ҡаға, талпына,
- Килтере-е-е-п би-и-и-р!- тиеп һөрән һала,
Баҫып кәртә башына. /әтәс/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡыт-ҡыт-ҡыт-ҡыт-ҡыт итә,
Килгәнебеҙҙе көтә,
Йомортҡаны алығыҙ! – тип,
Ул беҙгә хәбәр итә. /тауыҡ/
(Ғүмәр Ғайсин)

## ҠОШТАР ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Тау-ҡаяны төйәк итә,
Бер низән тормай өркөп.
Кемдең уны күргәне бар?
Ҡош батшаһы ул ... . /бөркөт/

Ҡыйыҡ башына йорт ҡуйҙым,
Ишек-тәҙрәһе асыҡ.
Яҙҙар еткәс, ҡайтып керҙе
Ошо йортҡа ... . /сыйырсыҡ/

Хужанан да, эттән дә
Һис тә ҡурҡып тормайҙар.
Ем һипкәйнем ҡаҙҙарға,
Килеп ҡунды ... . /турғайҙар/

Тәҙрәләремә ҡарап,
Ҡойма башына баҫҡан.
- Бөгөн ҡунаҡ көтөгөҙ, - тип
Шыҡырланы ... . /һайыҫҡан/

Ниңә ҡаҙҙар ҡаңғылдашып
Бәпкәләрен өйөргән?
Күктә ҡанаттарын йәйеп,
Бәпкә күҙләй ... . /төйлөгән/

Ниңә әле был балалар
Күккә ҡарап торалар?
Йылы яҡҡа үтеп китте,
Ҡаңғылдашып ... . /торналар/

Үҙе йомортҡа баҫмай,
Балаһын да баҡмай. /кәкүк/

Ҡулы юҡ, балсыҡ ташый,
Балтаһы юҡ, өй яһай. /ҡарлуғас/

Ҡыҙыл ситектәрен кейгән
Күк күлдәкле ҡыҙ килгән.

Күк күлдәк, ҡыҙыл ситекле
Әйтегеҙсе, кем икән? /күгәрсен/

Көндөҙ ул насар күрә.
Тап бына шуға күрә,
Үҙ ҡорбанын һағалап,
Төндә тора самалап. /ябалаҡ/

Айырып булмай был ҡоштоң
Исемен есеменән.
Һоҡландыра бөтәһен дә
Аҡтан-аҡ төҫө менән. /аҡҡош/

Осоп киләм, осоп киләм,
Күҙгә эләккәнде тибеп киләм. /бөркөт/

Ағас башында бер Ҡолой,
Көндөҙ йоҡлай, кис олой. /өкө/

Торған булһалар ҙа ҡысҡыралар
Торайыҡ та торайыҡ. /торна/

Баҫтырығы оҙон, көлтәһе ҡыҫҡа. /һайыҫҡан/

Көндөҙ йоҡлай, төнөн илай. /өкө/

Яңғыратып һыу буйҙарын
Һарай, алһыу таң тыуғас,
Моңло, дәртле … . /һандуғас/

Йылы яҡтан
Безгә килә,
Ул йылдарҙы
Һанай белә.
Был ниндәй ҡош?
Бирсе әйтеп! /кәкүк/

Бар белгәне ҡар ҙа ҡар,
Бер туҡтауһыҙ ҡар даулар.

Ниндәй ҡош мохтаж ҡарға?
Ни булһын инде … . /ҡарға/

Көнө буйы туҡ та туҡ,
Ағастан ҡорт табып туҡ.
Ағасты йырған ҡортҡа
Иң ҙур дошман … . /тумыртҡа/
«Ҡыж-ҡыж » тиеп тауыш бирә,
Мороно, гүйә, көрәк.
Йылы яҡтан яҙын ҡайта,
Ниндәй ҡош, тиһең? ... . /өйрәк/

Аяҡтары уның оҙон,
Әйт, ниндәй ҡош, уйлап торма.
Яҙын ҡайта көҙөн китә,
“Тор-райыҡ” тиһә лә … . /торна/

Өй артындағы тирәккә
Ҡайсаҡ ҡунып китә ул.
Ҡасан ҡунаҡтар килерен
Беҙгә хәбәр итә ул. /һайыҫҡан/

Талға ҡунып, йөҙ төрлө
Йыр йырланы маҡтансыҡ.
Булһа булһын маҡтансыҡ,
Үҙебеҙгә бик танһыҡ. /сыйырсыҡ/

Һайлап алып ҡыу ағасты
Көнө буйы туҡылдар,
Ҡорттан һаҡлай ағастарҙы,-
Ә исеме кем булыр? /тумыртҡа/
(Ғүмәр Ғайсин)

"Шыҡырыҡ-шыҡырыҡ!" - һөрән һала,-
Нимә икән ул тапҡан?
Аҡлы-ҡаралы кәүҙәле,-
Ул ҡош була - ... . /һайыҫҡан/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡатыҡты ла ул эсмәйҙер,
Эсмәйҙер ул һис тә һөт,
- Һөҙ һ-ө-ө-өт! - тип оҙаҡ өндәй
Тажлы башлы ҡош ... . /һөҙһөт/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ауыр йөк һөйрәгән һымаҡ,
- Тар-р-р-т!- та, - Тар-р-р-т!- ярҙам һорай,
Тыныс төбәкте ярата,
Был ҡош булалыр ... . /тартай/
(Ғүмәр Ғайсин)

Көндөҙ яратҡан урыны
Ҡоро ағаста - аулаҡ,
Төн етте ниһә һунар итә
Бесәй башлы ... . /ябалаҡ/
(Ғүмәр Ғайсин)

Иң моңло йырҙы тыңлата
Беҙгә, йәмле яҙ булғас,
Барса кеше бирелеп тыңлай,
Ул ҡош була ... . /һандуғас/
(Ғүмәр Ғайсин)

Моңло итеп ул саҡыра,
Күренеп бармай бик үк,
Кә-күк, кә-күк,- тигән һүҙен
Ҡабатлай оҙаҡ ... . /кәкүк/
(Ғүмәр Ғайсин)

Йәй көнөндә бер ҡош күрәң
Туҡтап, ҡанат елпегән,
Сысҡан аулай, йә сиңерткә,
Ул ҡош була ... . /төйлөгән/
(Ғүмәр Ғайсин)

Һауала ул батша инде,
Саңҡып бирә ул тауыш,
Бөрйән башҡортоноң ҡошо,

Ул булалыр ... . /ҡарағош/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ағас башында ояһы,
Йәйен-ҡышын ҡар даулай,
Ҡарауһыҙ ҡалдырһаң әгәр,
Себештәрҙән күҙ алмай. /ҡарға/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡанатлы ла ҡолаҡлы,
Төнөн генә оса ул,
Ҡош тип әйтеп булмай уны,-
Ниндәй хайуан була ул? /ярғанат/
(Ғүмәр Ғайсин)

БӨЖӘКТӘР ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Йоҡонан тора иртә,
Үҙен-үҙе һикертә.
Йәйен уйнап үткәрә
Сырылдауыҡ ... . /сиңерткә/

Матур итеп селтәр үрҙе
Кешеләрҙән күрмәксе.
Аҫҡа табан төштө китте
Селтәр буйлап ... . /үрмәксе/

Бейек кенә бейек ҡаялар,
Ул ҡаяға ҡыйғыр оялар.
Һурпаһы хәләл, ите хәрәм,
Ул ни булыр икән?! /бал ҡорто/

Бесәнлектә бер көршәкте
Ҡарап торғас бик оҙаҡ
Салғым менән тейеү булды –
Һырып алды ... . /һағыҙаҡ/

Ҡап-ҡаранғы бүлмәлә
Селтәр бәйләй ҡыҙ бала. /бал ҡорто/

Бейек тауға менәләр,
Тоҡтар йөкмәп киләләр. /ҡырмыҫҡа/

Деү-деү, деү итә – дуғаға ҡуна,
Сей-сей, сей итә – ситәнгә ҡуна. /күгәүен/

Беҙелдәп оса ла семетеп ала,
Ул семеткән ерҙә ҡан ҡала. /серәкәй/

Бал ҡортона бик оҡшаған,
Тик саҡһа, саға елле!
Шул бөжәктекеләй, тиҙәр,
Ҡыҙҙарҙың нәҙек биле. /һағыҙаҡ/

Гөжләп тора өй-йорттары,

Ҡупҡан һуң ниндәй ғауға?
Хәүеф килһә, күмәкләшеп,
Дәррәү сығалар яуға. /ҡырмыҫҡалар/

Нисек итеп биҙмәйҙәр,
Бер туҡтауһыҙ безләйҙәр.
Безләшеп, улар беҙгә
Сәскәнән бал эҙләйҙәр. /бал ҡорто/

«Тоттом» тигәндә, тороп китте,
«Баҫтым» тигәндә, тороп ҡасты. /сиңерткә/

Шем шекерә-мекерә,
Тотам тиһәң, һикерә. /сиңерткә/

Ат башлы,
Болан мөгөҙлө,
Бүре күҙә,
Бүкән һын,
Ҡош ҡанатлы,
Ҡырмыҫҡа аяҡлы. /сиңерткә/

Эт башлы,
Ырғаҡ муйынлы,
Бүре күҙәле,
Бүкән һынлы,
Ҡуш ҡанатлы,
Тиктормаҫ йәнле. /сиңерткә/

Аяғы ҡулдан юғары,
Һикерә талдан юғары.
Ни ҡош түгел, ни ҡорт түгел,
Теҙе билдән юғары. /сиңерткә/

## ТӘБИҒӘТ КҮРЕНЕШТӘРЕ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Әй, малайҙар! Әй, ҡыҙҙар!
Ҡойҙоғоҙмо ҡоймаҡтар?
Килегеҙ, әйҙә, ултырығыҙ,
Табышайыҡ йомаҡтар.
(Ғүмәр Ғайсин)

Йәйен томра эҫелә
Күгәреп болоттар килһә,
Тамсылар булып тамыр,
Был ни була? Был ... . /ямғыр/
(Ғүмәр Ғайсин)

Күктән яуа ынйылай,
Үҙе ап-аҡ, мамыҡтай,
Аяҡ баҫһаң - шығырҙай,
Ул ҡыштың йырын йырлай. /ҡар/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ағастарға ул ҡунған,
Ап-аҡ ҡар һымаҡ булған,
Анау урман әкиәттәге
Көмөш аҡ урман булған. /бәҫ/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡыш көнө генә яуа,
Сафланып ҡала һауа,
Атлағанда шығыр-шығыр
Эҙҙәрҙе уйып ала. /ҡар/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ап-аҡ ҡына, шәкәр түгел,
Йылыға иреп бара.
Ҡышын ерҙе ҡаплап ала,
Йомшаҡ ҡына, тотоп ҡара. /ҡар/

Эй, ыжғыра, асыулана,
Үкерә, ярһый, өрә.

Кеше йөрөй алмаһын, тип,
Ҡарҙарҙы юлға өйә. /буран/

Өшөттөрә, туңдыра –
Үҙе күренмәй күҙгә.
Ҡайсаҡ ул йүгерттерә,
Йылы тунды кейҙерә. /һыуыҡ/

Аҡ мунсаҡ төшөп ҡалды,
Ай күрҙе, ҡояш алды. /ысыҡ/

Осоп китә, йөҙөп китә,
Ваҡыт еткәс, иреп бөтә. /ҡар/

Йондоҙ булып ҡойола,
Мамыҡ булып йыйыла.
Ел булһа, оса,
Яҙ булһа, ҡаса. /ҡар/

Үкерә лә ҡотора,
бөтә ерҙе тултыра. /буран/

Күктән килде, ергә китте. /ямғыр/

Ялт-йолт ялтырай,
Ерҙең өҫтө ҡалтырай. /йәшен/

Тау арҡылы уҡ аттым,
Атҡан уғым юғалттым. /йондоҙ атылыу/

Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ тәҙрә ҡаға. /ел/

Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,
Һөйләшергә теле юҡ,
Ҡояш кеүек нуры юҡ,
Күрергә күҙе юҡ,
Һис етмәгән ере юҡ. /ел/

Уты юҡ, төтөнө бар. /томан/

Таҫмаларым йыуам да,
Киптерәмен дуғамда. /йәйғор/

Ишек алды таш була,
Өйгә инһә, һыу була. /боҙ/

Ишектән керер, түргә уҙыр. /һыуыҡ/

Аҡ булһа ла, һөт түгел,
Күп булһа ла, йөк түгел.
Һыу буйында ярала,
Ҡояш сыҡһа, тарала. /томан/
Йәшенегеҙ, ти, тиҙерәк,
Ҡурҡыныс минең утым.
Ҡаялағы бөркөттөң дә
Алам да ҡуям ҡотон. /йәшен/

Иретһәң, һыу була,
Ҡайнатһаң, быу була. /ҡар/

Мин дә эй күшегеп бөттөм,
Урман-ҡырҙар күшекте.
Күк күкрәүен ер аҫтында
Һуҡыр сысҡан ишетте. /ямғыр/

Ямғыр тынды, ҡояш сыҡты,
Ҡалҡты күктә ҙур күпер.
Шул күперҙең бөтә төҫөн
Айыра ала тик өлгөр. /йәйғор/

Көндөҙ йоҡлай, төндә илай. /ысыҡ/

Ҡыш буйы ятты - ятты ла,
яҙын тороп сапты. /ҡар/

Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ, бабай. /ҡар/

Утта янмай, һыуҙа батмай. /боҙ/

Сәстәремде тағатып
Йөрөй нисек иренмәй?
Әллә уйнай йәшенмәк,
Үҙе ҡайҙа? Күренмәй. /ел/

ЙӘШЕЛСӘЛӘР ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Йәшелсә - витаминдар,
Ашайым да ҡуямым.
Йәшелсәләр хаҡында мин
Һеҙгә йомаҡ ҡоямын.

Бер-береһенән уҙышып
Үҫәләр гел бер өйҙә.
Өйҙәрен төп тип атайым,
Сығалар өйҙән көҙгә. /картуф/

Ҡыяҡтары йәм-йәшел дә,
Һап-һары унығ башы.
Ашнаҡсыны илатһа ла,
Их, тәмләй ул һәр ашты. /һуған/

Ҡып-ҡыҙыл ғына күлдәкте
Ҡайҙан ала ... ?
Күлдәге матур булғас ни,
Уға хатта ер аҫтында
Һис күңелһеҙ түгелдер. /сөгөлдөр/

Ерҙән ҡаҙып алалар,
Аш, бәлешкә һалалар.
Көлгә күмә малайҙар,
Иҙеп ашай бабайҙар. /картуф/

Миңә оҡшай ҡурғаны,
Кетерләп үк торғаны,
Маҡтап бөтөргөһөҙ, уф!
Нимә ашайым? … . /картуф/

Әбей түгел, бабай түгел,
Үҙе ҡат-ҡат тун кейә,
Һыуҙар һибеп үҫтерәбеҙ-
Ул дымлы ерҙе һөйә.
Йәшкелтем һәм аҡ төҫтә,
Шытырлап тора тештә,

Ә исеме - ... . /кәбеҫтә/

Тәҙрәһе юҡ, ишеге юҡ,
Эсе тулы халыҡ. /ҡыяр/

Ер аҫтында алтын ҡаҙыҡ. /кишер/

Ҡат-ҡат тунлы,
Ҡарыш буйлы. /кәбеҫтә/

Бабай ҡат-ҡат тун кейгән,
Сисендерһәң – иларһың. /һуған/

Үҙе генә ашалмай,
Унан башҡа аш бармай. /һуған/

Келәте бар, малы юҡ,
Балаһының һаны юҡ. /ҡыяр/

Үҙе һимеҙ – майы юҡ,
Тиреһе ҡалын – йөнө юҡ. /шалҡан/

Йәшкелт аҡһыл төҫтә ул,
Ҡатлы-ҡатлы күлдәкле,
Әсәй турап ашҡа һала,
Ашағанда бик тәмле. /кәбеҫтә/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡуян бик ярата икән
Ул ҡыҙыл йәшелсәне,
Ҡыш көнөндә Ҡар-бабайҙың
Танауы ул - беләһеңме? /кишер/
(Ғүмәр Ғайсин)

Әрсей ҡалһаң, йәһәт кенә
Күҙ йәштәрен ағыҙа.
Уны ашаһаң сирләмәйһең,-
Кәрәк түгел дарыу ҙа. /һуған/
(Ғүмәр Ғайсин)

Йоморо уның кәүҙәһе,
Унан аштар бик тәмле,
Әйт әле, һин, әйт әле,-
Был нимә ул? /бәрәңге/
(Ғүмәр Ғайсин)

Әй,малайҙар,әй,ҡыҙҙар!
Оҡшанымы йомаҡтар?

ЭШ ҠОРАЛДАРЫ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Түтәлдерҙе ҡаҙып бөткәс,
Мыштырлап оҙаҡ торма.
Эшкә тотон йәһәт кенә
Ҡулыңа алып… . /тырма/

Бесән ҡалай ныҡ кипкән,
Йыйырға ваҡыт еткән.
Ҡарап торма,тик торма,
Йә,ҡулыңа тот … . /тырма/

Был ҡоралды сабый саҡтан
Ҡулда тоторға кәрәк.
Ғүмер буйы бары файҙа
Бирә кешегә… . /көрәк/

Ҡар көрәргә
Булһа кәрәк,
Нимә кәрәк?
Дөрөҫ! ... . /көрәк/

“Т” хәрефенә оҡшаш был
Оҫтаға кәрәк ҡорал.
Һыры бар урау-урау,
Был нимә? Был бит ... . /бырау/

Әй, күп тә һуң тештәре!
Әй, күп тә һуң эштәре!
Ағасты «ашай-ашай»,
Төрлө әйберҙәр яһай. /бысҡы/

Нисек кенә бәйләп тотма,
Ятҡырып булмай тоҡта.
Барыбер сыға тишеп,
Уның исеме нисек? /беҙ/

ЙЫЛ МИҘГЕЛДӘРЕ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Ҡар ирепˌер күренер,
Һайрар ҡоштар ҙа килер,
Йәшел үләндәр үҫер,-
Был ниндәй ваҡыт етер? /яҙ/
(Ғүмәр Ғайсин)

Көндәр бигерәк эҫелер,
Еләктәр ҙә бешәлер.
Көн дә беҙ һыу инәбеҙ,-
Ниндәй ваҡыт? Әйт әле. /йәй/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ағастарҙан, һарғайып,
Япраҡтар ергә төшә.
Баландар ҡыҙарып бешә,-
Был ниндәй ваҡыт етә? /көҙ/
(Ғүмәр Ғайсин)

Көндәре һыуыҡ булыр,
Ерҙең өҫтө аҡ булыр,
Балалар санала шыуыр,-
Был ниндәй ваҡыт булыр? /ҡыш/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡара ерҙең өҫтөнә
Ҡаҙ мамығын кем һипкән?
Аҡ юрғанды кем теккән,
Ап-аҡ ондо кем һипкән? /ҡыш/

Бабайым килә һағынып,
Аҡ толобон ябынып. /ҡыш/

Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ бабай. /ҡыш/

Битеңде алландырыр,
Өҫтөңдө ҡарландырыр. /ҡыш/

Ҡурыштыра, бөрөштөрә,
Ике ҡулды һуғыштыра. /ҡыш/

Аҡ юрғанын ташлай,
Һыртын аса башлай. /яҙ/

Ҡара мыйыҡлы еҙнәм
Һағынып-һағынып килгән. /яҙ/

Аҡ юрғаным алып ҡуйҙым,
Йәшел юрғаным йәйеп ҡуйҙым. /яҙ/

Йәшел елән йәйепҡуйҙы,
Бар ҡайғыны алып ҡуйҙы. /йәй/

Кейгән кейеменең биҙәге
Бар донъяны биҙәне. /йәй/

Үҙе илай, үҙе һыйлай. /көҙ/

Ашай ҙа ашай,
Илай ҙа илай,
Бала-сағаны
Өйгә ҡыуалай. /көҙ/

Үҙе туҡ кеүек,
Ҡайғыһы юҡ кеүек,
Илай башлаһа –
Туҡтамай. /көҙ/

Ҡарҙар ирене,
Һыуҙар йүгерҙе,
Илап йылғалар,
Йәштәр түгелде.
Көндәр оҙая,
Төндәр ҡыҫҡара,
Был ҡайһы ваҡыт,
Йә, әйтеп ҡара? /яҙ/

(Ғ.Туҡай)

Ашлыҡтар үҫте,
Башаҡтар беште,
Ҡояш бешерә,
Тиргә төшөрә.
Халыҡ ашыға,
Китә баҫыуға,
Игенен ура -
Был ҡай саҡ була? /йәй/
(Ғ.Туҡай)

Ҡырҙар буш ҡала,
Ямғырҙар яуа,
Ерҙәр дымлана -
Был ҡай саҡ була? /көҙ/
(Ғ.Туҡай)

Һәр ер ҡарланған ,
Һыуҙар боҙланған ,
Уйнай ел-буран -
Был ҡай саҡ, туған? /ҡыш/
(Ғ.Туҡай)

АҒАСТАР ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР
Йәшел төҫлө кейемдәрен
Кейеп тора ағайҙар.
Йәйҙәр үтә, көҙҙәр үтә -
Һис бер уны һалмайҙар. /шыршы/

Бер ағаста мең ҡара. /муйыл/

Уңмай көндә - ҡояшта,
Йәшел була ул ҡыш та.
Оҙон буйлы бер ағай –
Күпте күргән ... . /ҡарағай/

Ул хас бойҙай орлоғо –
Шундай ғына ҙурлығы.
Етһен әле йәй генә -
Ул япраҡҡа әүерелә. /бөрө/

Суҡ толомло, аҡ һынлы,
Гел һөйкөмлө, яғымлы.
Сағылда табып яйын
Сәләмләй килгән һайын. /ҡайын/

Йәй ҙә йәшел, ҡыш та йәшел
Тауҙа ла, урманда ла.
Ултыра уртала илап
Ҡыш байрам ҡорғанда ла. /шыршы/

Йәм-йәшел йәйен,ҡышын да,
Энәһе күп ботаҡта.
Ул төҙәнә беҙгә килеп
Яңы йылда ҡунаҡҡа. /шыршы/
(Ғүмәр Ғайсин)

Майҙа ап-аҡ күлдәкле,
Унан йәшеллек кейә.
Ҡарайғас шул күлдәге,
Башҡайын түбән эйә. /муйыл/

Гел бейеккә, гел киңлеккә әйҙәр,
Йәмле булыр унан өйҙәр-өйҙәр,
Өй аҫтына һалһаң, йөҙ йыл түҙәр,
Ныҡ кешене уның кеүек тиҙәр. /имән/

Күлдәктәре аҡ ҡына,
Бөҙрә уның сәстәре.
Бысаҡ тейҙеме яҙын,
Сәсрәп сыға йәштәре.
Тик яраламаһын һис кем
Матур йәшел дуҫҡайын.
Урман булып шаулаһын
Беҙҙең ерҙә аҡ. /ҡайын/

Аҡ кейемен кейгән
Йәшел суғын элгән. /ҡайын/

Ирендәрҙе күгәртә,
Ҡан баҫымын үҙгәртә.
Яҙын, әйтерһең, кәләш,
Күҙөн – көп-күрән ... . /миләш/

Урамдарҙа йәй бураны,
Ап-аҡ иткән йорт-ҡураны. /тирәктәр

ЕМЕШ-ЕЛӘКТӘР ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Алма тиһәң, алма түгел,
Ҡыяр тиһәң - түңәрәк. /киви/

Сәскәһе ап-аҡ, емеше ҡыҙыл,
Ҡыҙарып беште, ергә төштө. /алма/

Эсе ҡыҙыл, тышы ҡара,
Ышанмаһаң, ашап ҡара. /ҡарағат/

Кәкре ҡайын аҫтында,
Ҡан тамсылап ултыра. /ҡурай еләге/

Үләндәрҙә ҡыҙарып бешер,
Һабағын бөгөп, ергә төшөр. /ер еләге/

Лампочкаға бик оҡшаған
Татлы был емеш.
Исемен әйтһәң, һиңә лә
Сығарам өлөш! /груша/

"Бал"лы ижеге булһа ла,
Һис тә түгел ул татлы.
Миләшкә оҡшаш емештең,
Йә, исемен кем тапты? /балан/

"Алма" тиһәң, алалар.
Нимә һуң ул, балалар? /алма/

Ҡыҙыл төймә таптым,
Ауыҙыма ҡаптым. /ер еләге/

Үҙе ҡып-ҡыҙыл,
Күлдәге йәм-йәшел. /ер еләге/

Оҙон ҡурай үләндәр,
Ҡыҙыл алҡа элгәндәр. /ҡурай еләге/

Түңәрәк-түңәрәк шар кеүек,
Ҡыҙыл-ҡыҙыл ҡан кеүек,
Әсе лә, татлы ла,
Йотайым тиһәң, ташлы ла. /сейә

ҺӨНӘРҘӘР ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Шым йөрөй еңел баҫып,
Мылтығын алған аҫып,
Шулай һунар итә ул,
Ул кеше кем була ул? /һунарсы/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡармаҡ алып ҡулына
Китә йылға буйына,
Көн оҙон тик ултыра,
Сабаҡ,суртандар тота. /балыҡсы/
(Ғүмәр Ғайсин)

Атҡа атланып һыбай
Һыҙғыра йә ул йырлай,
Үҙе төшмәй эйәрҙән,
Эте уға эйәргән. /көтөүсе/
(Ғүмәр Ғайсин)

Иртүк тороп фермаға
Йүгерә атлай бара,
Аҡ халатын кейеп алып
Кем әле һыйыр һауа? /һауынсы/
(Ғүмәр Ғайсин)

Тыпыр-тыпыр, тыпыр-тыпыр...
Һикереп йөрөй туптай.
Ҡош ҡанатылай ҡулдары,
Күҙҙәре яна уттай. /бейеүсе/

Эшем күп шул - хат ташыйым
Өйҙәрҙән өйгә кереп.
Ҡаршы сығып алалар,
Минең килгәнде күреп. /хат ташыусы/

Хат , газета-журналдарҙы
Ул бар өйгә тарата.
Пенсия биргәнгә күрә,
Бар өлкәндәр ярата. /хат ташыусы/

Тәмле аштар бешерә,
Аш-һыуы төшкә керә.
Әйтегеҙсе, кем һуң шулай
Барыбыҙҙы ла һыйлай? /ашнаҡсы/

Ут менән көрәшәбеҙ беҙ,
Шуға көслө, ҡыйыубыҙ.
Бар кешегә кәрәк һөнәр –
Әйтегеҙсе, беҙ кемдәр? /янғын һүндереүселәр/

Беҙ бик иртә торабыҙ,
Алдыбыҙҙа - юлыбыҙ.
Барығыҙҙы ла йыйып,
Кәрәк ергә илтербеҙ. /автобус йөрөтөүсе/

Уҡырға ла өйрәтә,
Яҙырға ла өйрәтә.
Уны белә һәр кеше,
Ул була … . /уҡытыусы/

Ул ҡалалар төҙөй
Ҡағыҙҙа йылдар буйы.
Хыялы һәм оҫта ҡулы
Бүләк итә өй туйы. /архитектор/

Быяла күҙен көйләй ҙә
Бер генә йомоп ала –
Һеҙҙе иҫтә ҡалдыра.
Аңлатығыҙ, был эште
Кем бик оҫта башҡара? /фотограф/

МУЗЫКА ҠОРАЛДАРЫ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Таҡыя башын тубайтып,
Үҙе урманда үҫә.
Елкендереп күңелде,
Йәшен-ҡартын бейетә.
Наҙлы моңло был ҡорал
Нindәй исем йөрөтә? /ҡурай/

Ҡырҙа үҫкән бер бала
Өйгә килеп моң һала. /ҡурай/

Бәләкәй генә көпшәлә
Уйылғандар тишектәр.
Моңло тауыш сығарһа,
Бейеп китә ситектәр. /ҡурай/

Үҙе үҫемлек,
Унан да моңло нәмә юҡ. /ҡурай/

Ҡарар күҙгә ҙур түгел,
Киләсәге ҙур уның. /ҡумыҙ/

Кире кәпәс кире һикерә. /ҡумыҙ/

Туҡмағанды ярата,
Бик дәртле көй тарата:
Тра-та-та-та! Тра-та-та! /барабан/

Эсе ҡыуыш,
Даңғылдарға уны ҡуш./барабан/

Йәнле йәнһеҙҙе ҡыйнай,
Йәнһеҙ ҡысҡырып илай. /барабан/

Сирткән һайын терт итә,
Шунда уҡ йырлап китә. /мандолина/

Телдәре күп булғанғалыр,

Көй һуҙа моңло итеп.
Яратам уны шуға мин,
Тыңлайым иҫем китеп. /гармун/

Тартыла ла һуҙыла,
Бар донъяға моң һала. /гармун/

Ауыҙы юҡ, күп телле,
Дәртләндермәй һуң кемде? /гармун/

Бармаҡ менән баҫалар,
Уйнап күңел асалар. /пианино/

Тейһәң, илаған,
Тауышы халыҡҡа уйнаған.
Эсендә эсәге бар,
Тышында түшәге бар. /думбыра/

Ҡолағы – ҡойроҡ осонда,
Эсәге – кендек өҫтөндә,
Тейһәң, илай. /думбыра/

Ебенә тейһәң, илаған,
Тауышы матур сыңлаған.
Өҫтөндә эсәге бар,
Аҫтында түшәге бар. /скрипка/

ИКМӘК ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР.

Әсәй әйтә бер йомаҡ:
Ап-аҡ ҡына тумалаҡ,
Аҡ мейескә инеп ята
Йомро-йомро йомарлаҡ. /икмәк/

Әсәйем мейескә һалһа,
Табала ул ҡабара.
Бешкәс телеп кенә алһаң,
Тәмле еҫтәр тарала.
Нимә һуң ул? Кем белә?
Йә әйтегеҙ тиҙ генә. /икмәк/

Бик ҡәҙерләп кенә телеп
Ашъяулыҡҡа һалалар,
Ул өҫтәлдә иң бөйөк аш,-
Был ни була,балалар? /икмәк/
(Ғүмәр Ғайсин)

ҠЫШ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Көндәре һыуыҡ булыр,
Ерҙең өҫтө аҡ булыр,
Балалар санала шыуыр,-
Был ниндәй ваҡыт булыр? /ҡыш/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ҡара ерҙең өҫтөнә
Ҡаҙ мамығын кем һипкән?
Аҡ юрғанды кем теккән,
Ап-аҡ ондо кем һипкән? /ҡыш/

Бабайым килә һағынып,
Аҡ толобон ябынып. /ҡыш/

Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ бабай. /ҡыш/

Битеңде алландырыр,
Өҫтөңдө ҡарландырыр. /ҡыш/

Ҡурыштыра, бөрөштөрә,
Ике ҡулды һуғыштыра. /ҡыш/

Ап-аҡ ҡына, шәкәр түгел,
Йылыға ереп бара.
Ҡышын ерҙе ҡаплап ала,
Йомшаҡ ҡына, тотоп ҡара. /ҡар/

Ҡышын яуа аҡ булып,
Бигерәк тә йомшаҡ булып,
Атлағанда - шығыр-шығыр,
Эҙҙәрҙе ала уйып. /ҡар/
(Ғүмәр Ғайсин)

Күктән яуа ынйылай,
Үҙе ап-аҡ, мамыҡтай,
Аяҡ баҫһаң - шығырҙай,

Ул ҡыштың йырын йырлай. /ҡар/
(Ғүмәр Ғайсин)

Ағастарға ул ҡунған,
Ап-аҡ ҡар һымаҡ булған,
Анау урман әкиәттәге
Көмөш аҡ урман булған. /бәҫ/
(Ғүмәр Ғайсин)

Эй, ыжғыра, асыулана,
Үкерә, ярһый, өрә.
Кеше йөрөй алмаһын, тип,
Ҡарҙарҙы юлға өйә. /буран/

Өшөттөрә, туңдыра –
Үҙе күренмәй күҙгә.
Ҡайсаҡ ул йүгерттерә,
Йылы тунды кейҙерә. /һыуыҡ/

Ҡыш көнө генә яуа,
Сафланып ҡала һауа,
Атлағанда шығыр-шығыр
Эҙҙәрҙе уйып ала. /ҡар/

Осоп китә, йөҙөп китә,
Ваҡыт еткәс, ирեп бөтә. /ҡар/

Йондоҙ булып ҡойола,
Мамыҡ булып йыйыла.
Ел булһа, оса,
Яҙ булһа, ҡаса. /ҡар/

Үкерә лә ҡотора,
Бөтә ерҙе тултыра. /буран/

Ишек алды таш була,
Өйгә инһә, һыу була. /боҙ/

Ишектән керер, түргә уҙыр. /һыуыҡ/

Иретһәң, һыу була,
Ҡайнатһаң, быу була. /ҡар/

Ҡыш буйы ятты - ятты ла,
Яҙын тороп сапты. /ҡар/

Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ, бабай. /ҡар/

Утта янмай, һыуҙа батмай. /боҙ/

ҒАИЛӘ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР.

Тәмле аштар бешерә,
Матур гөлдәр үҫтерә.
Өйөбөҙҙөң нуры ул,
Барыбыҙҙан оло ул. /өләсәй/

Унының сәскәйҙәре аҡтан-аҡ,
Һырлы-һырлы маңлайы.
Минең атай ҙур булһа ла,
Унының кесе малайы. /олатай/

Беҙҙең арала ул бигерәк көслө,
Белмәгән эше юҡтыр ҙа төҫлө.
Унының кеүек иртүк торормон,
Төрлө һөнәргә эйә булырмын. /атай/

Ул булмаһа, өй ҡараңғы,
Ул булмаһа, аш тәмһеҙ.
Ул –иң ҡәҙерле кеше,
Йәшәй алмайбыҙ унһыҙ. /әсәй/

Татлынан татлы,
Әсәйҙәргә кем татлы?/бала/

Әсәйемдең өлкән ҡыҙы ул,
Ә миңә кем булыр һуң?/апай/

Эй һөйләшә бер үҙе,
Аңлашылмай һис һүҙе.
Тәү аҙымдарын атлай,
Йығылһа, илап ятмай. /ҡусты/

ЕР, УТ, ҺЫУ ҺӘМ ҺАУА ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Был донъяла бар дүрт ағай,
Береһе гел йүгерә – бер ҙә арымай,
Икенсеһе гел ашай – бер ҙә туймай,
Өсөнсөһө гел эсә – бер ҙә ҡанмай,
Дүртенсеһе гел көйләй – бер ҙә тауышы бөтмәй. /һыу, ут, ер, ел/

Еҫе юҡ, төҫө юҡ,
Унан башҡа тормош юҡ. /һыу/

Һоҫоп алдым – урыны юҡ. /һыу/

Баш тауҙа, аяғы диңгеҙҙә. /йылға/

Бормалы ла һуҙмалы,
Осона сыҡҡан булманы. /йылға/

Ҡышын йоҡлай, яҙын дулай. /йылға/

Тауҙан тыуа,
Түбән шыуа,
Ағаһын ҡыуа. /шишмә/

Туҫтаҡ тулы һыу,
Һыуҙың өҫтө быу. /күл/

Киң яурынлы бер ата
Балаларын тарата,
Тарата ла кире ала. /диңгеҙ/

Үҙе бында,
Үҙе беленмәй.
Тынға беленә,
Күҙгә күренмәй. /һауа/

Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡапҡа аса. /ел/

Тауышы бар, һүҙе юҡ,

Һөйләшергә үҙе юҡ. /ел/

Зәңгәр ашъяулыҡ
Бөтә донъяны ҡаплаған. /күк йөҙө/

Ҡыҙарып килеп сыға,
Яҡты нурҙарын һуҙа,
Көнө буйы йылыта,
Кисен өйөнә ҡайта. /ҡояш/

Тау артынан ут сыҡҡан. /ҡояш/

Донъя биҙәр йәм бит ул,
Һүнмәй торған шәм бит ул.
Алыҫ булһа ла үҙе,
Балҡып нурлана йөҙө. /ҡояш/

Йә көмөш ураҡҡа оҡшаш,
Еҙ батмусҡа ҡай ваҡыт,
Төнөн күктән нурын һибә,-
Әйт әле шуны табып. /ай/

Күктә тора кәүҙәһе,
Ергә төшә шәүләһе. /ай/

Ҡай ваҡыт ҡояш кеүек.
Ҡай ваҡыт ураҡ кеүек. /ай/

Сөм ҡара ашъяулыҡтың
Уртаһында – аҡ табаҡ.
Ялтыр сынаяҡтарҙы
Бөтөрлөк түгел һанап. /ай һәм йондоҙҙар/

Төнө буйы ем-ем итеп
Күҙ ҡыҫышып яналар,
Ҡояш сығыр мәл етһә,
Улар һүнеп йоҡлайҙар. /йондоҙҙар/

Өй башында сыбар кейеҙ. /йондоҙҙар/

Гәүһәр һиптем – ергә төшмәй,
Алайым тиһәм – буйым етмәй. /йондоҙҙар/

Килә-килә күп була,
Илай-илай юҡ була. /болот/

Үҙе аға – яры юҡ,
Барып еткән ере юҡ. /болот/

Әллә диңгеҙме йөкмәгән,
Йөкмәгәнме океан?
Күкте ҡаплап килеп сыҡты,
Уға нисек һыу һыйған!? /болот/

Ята торған яҫтығым
Сыбарлана, йәмләнә,
Төрлө төҫкә әйләнә. /ер/
Аҡ тунын кейә ҡышын,
Яҙын ҡара күлдәген.
Йәйен йәшелде кейһә,
Көҙөн һары төҫтәген. /ер/

Ҡыҙыл әтәс итһә ялт-йолт,
Ҡалмай унан бер йәм, бер ҡот. /ут/

Ҡыуыш эсендә ҡыҙыл әтәс. /ут/

Күрергә күркәм, тоторға ҡурҡам. /ут/

Шаян һары бесәйем
Битен йыуып ултыра,
Ел сыҡтымы – ҡотора. /ут/

Өй башында айыу бейей. /төтөн/

АҢ-БЕЛЕМ, УҠЫУ-ЯҘЫУ, УҠЫУ ӘСБАПТАРЫ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Бер байлыҡ бар – янмай,
Ҡараҡ та урлай алмай,
Төшөп тә юғалмай. /белем/

Аҡыллы сәсә барыр,
Аҡылһыҙ йыя барыр. /белем/

Әйтермен – минән китер,
Тыңламаһаң – Һинән китер./һүҙ/

Аҡсаһыҙ инәһең,
Хазина алып сығаһың. /мәктәп/

Теле юҡ, һүҙе бар,
Күҙе юҡ, күрһәтә,
Бар нәмәне өйрәтә. /китап/

Ҡат –ҡат ҡатлама,
Аҡылың булһа, ташлама. /китап/

Ағас түгел - япраҡлы,
Тун түгел – тегелгән. /китап/

Шишмә түгел, әммә үҙен
"Белем шишмәһе” тиҙәр.
Бик белемле булғың килһә,
Ҡулдан төшмәһен, тиҙәр. /китап/

Орлоғо ҡара,ере аҡ,
Ҡул менән сәсәләр,
Күҙ менән йыялар. /яҙыу, уҡыу/

Бишәү сәсә, берәү йыя. /яҙыу, уҡыу/

Иген сәсте биш малай,
Урҙылар ике ағай. /яҙыу, уҡыу/

Ҡул менән сәсәһең,
Күҙ менән йыяһың. /яҙыу, уҡыу/

Аҡ ерҙә эҙ һалған,
Эҙ ҡалмаған, һүҙ ҡалған. /яҙыу/

Ҡалаһы бар, халҡы юҡ,
Дингеҙе бар, һыуы юҡ. /карта/

Ямауы бар, йөйө юҡ. /карта/

Бабай бүреге йөҙ ямау. /глобус/

Өнһөҙ юлдар күрһәтер,
Күп нәмәгә өйрәтер. /компас/

Йүнәлештәрҙе күрһәтә,
Сәғәт түгел – теле бар.
Аҙаштырмай бер ҡасан,
Нимә һуң ул, балалар? /компас/

Аҡҡоштоң бер үҙенә
Өс йөҙ алтмыш биш ҡанат,
Мин торам уны һанап.
Көн дә кәмей бер ҡанат. /календарь/

Тимер ҡоҙоҡ, оҙон ҡойроҡ, бирә бойороҡ. /ручка/

Үҙе укый белмәһә лә,
Ғүмер буйы һүҙ яҙа. /ҡәләм, ручка/

Ҡулланған һайын
Ҡыҫҡара бара;
Ҡыҫҡарған һайын
Оҫтара бара. /ҡәләм/

Оҙон, йоҡа, төп-төҙ ул,
Билдәләй ул иң төҙ юл.

Юлдарҙың оҙонлоғон
Беләм һанап һыҙығын. /линейка/

Ишекле, тәҙрәһеҙ
Тап-тар өйҙә йәшәйҙәр.
Әҙерләгәндә дәрес
Сиратлашып эшләйҙәр. /пенал, ручка-ҡәләмдәр/

Торалар бергә бер йортта,
Төрлөһө төрлө төҫтә.
Аҡ ҡығыҙға бер ҡул йөрөтә
Төрлөһөн төрлө эшкә. /төҫлө ҡәләмдәр/

Ун ике битле,
Һыҙыҡ ситле,
Ап-аҡ төҫлө,
Тимер епле. /дәфтәр/

КЕШЕ, УНЫҢ ТӘН АҒЗАЛАРЫ ТУРАҺЫНДА ЙОМАҠТАР

Донъяла бер йән бар,
Унан көслө кем бар? /кеше/

Иртән – дүрт аяҡ,
Төш – ике аяҡ,
Кис – өс аяҡ. /кеше/

Тәнем дә ул, йәнем дә ул,
Һикертә лә ул, йүгертә лә ул. /бала/

Көйҙөрә, һөйҙөрә,
Батшаны баш эйҙерә. /бала/

Ике бағана,
Бағана өҫтөндә мискә,
Мискә өҫтөндә шар,
Шар өҫтөндә урман. /кәүҙә/

Үҙе бер, йәбе дүрт,
Һәр йәбендә бишәр ботаҡ. /кәүҙә/

Бәләкәй генә бер һандыҡҡа
Донъялағы бөтә нәмә һыя. /баш/

Шарҙы урман ҡаплаған,
Йылдар үткәс салланған. /баш/

Бер йомғаҡта ете тишек. /баш/

Оло урман, оло урманға етә кесе урман, кесе урманға етә ялтырауыҡ, ялтырауҡҡа етә мышылдауыҡ, мышылдауыҡҡа етә шапылдауыҡ. /сәс, ҡаш, күҙ, танау, ауыҙ/

Оло урман да кесе урман,
Береһен ҡыралар,
Береһен һаҡлап торалар. /сәс һәм ҡаштар/

Йөҙләк аҫтында йөҙ энә,
Ялт-йолт ябыла,
Йоҙаҡһыҙ бикләнә. /керпектәр/

Ҡыл-ҡыл, ҡыл һарай,
Ҡыл һарайҙың эстәрендә
Ҡыл аттарым уйнаҡлай. /керпектәр/

Тәрән күл - һыуы аҡмай. /күҙ/

Бер яланда ике күл. /күҙҙәр/

Ике туған бер-берһен күрмәһә лә,
Ғүмер буйы бергә ятып, бергә тора. /күҙҙәр/

Ике туған йәнәшә,
Сыға алмай тау аша. /күҙҙәр һәм танау/

Икәү ҡарап тора,
Икәү тыңлап тора,
Берәү һайрап тора. /күҙҙәр, ҡолаҡтар һәм тел/

Бер ағасҡа ике япраҡ. /ҡолаҡтар/

Аръяҡта ла,
Бирьяҡта ла
Ярты аласыҡ. /ҡолаҡтар/

Бер түңгәктә Тарбай,
Һис тә төшә алмай. /танау/

“Тей!”- тиһәң, теймәй,
“Теймә!” - тиһәң тейә. /ирендәр/

Бәләкәй генә ел ҡапҡа
Асыла ла ябыла. /ирендәр/

Бикләнмәгән һандығымда
Утыҙ ике ынйым бар. /тештәр/

Ҡыҙыл кәртә өҫтөнә
Аҡ тауыҡтар ултырған. /тештәр/

Таш аҫтында булһа ла
Бер ҙә тик тормай. /тел/

Һөйәге юҡ, ние юҡ,
Һөйләмәгән һүҙе юҡ. /тел/

Уртаһы уйылған, ике яҡҡа ҡыйылған. /мыйыҡ/

Атайымдың урманы үҫкән,
Осо-башы ергә төшкән. /һаҡал/

Ике яғымда ике ҡарауыл. /яурын, ҡулбаш/
Йыуан ағасҡа йөк аҫтым. /елкә/

Яҫы таҡта, ятып маҡта,
Яғырға ла ярамай,
Ябыуға ла ярамай. /арҡа/
Атайымдың тал сыбығы
Бөгөлә лә һығыла. /бил/

Биш балаға бер исем. /бармаҡ/

Бер таяҡта өс быуын. /бармаҡ/

Бер әсәлә биш бала. /ҡул/

Ике ағай йәнәшә бара
Береһен-береһе уҙыша бара. /аяҡтар/

Береһе алға китеп бара,
Икенсеһе ҡалып бара.
Ҡыуып етә, уҙып китә,
Тегенеһен көтөп ала. /аяҡтар/
Алға сыҡһа ла урыны артта,
Артта ҡалһа ла урыны артта. /үксә/